Фекерләү һәләтен үҫтереү өсөн эш

1. Ҡ йәки к ?

1. ... амилә мәк...тәптән ... айта. 2. ... өслө ямғыр яуа башланы.
3. Без ба... сала ... ишер, сөгөлдөр һәм ... артуф ултырттты....
4. ... атя менән Илгизәр урманға бәшмә... кә баралар.
5. ... амил ... үгәрсендәргә ем һалды.

2. Текста бирелгән исем-фамилияларҙы үҙегеҙ белгән исем- фамилиялар менән алмаштырып яҙығыҙ.

Дежур тороу.

Беҙ бөгөн дежурбыҙ. Һәр уҡыусыға эш бирелгән. Хәсәнов Исмәғил менән Сәйфуллина Резедә гөлдәрҙе тәрбиәләй. Абдрахманов Дамир таҡтала яҙғанды һөртә. Ибраһимов Данил тәнәфестә төрлө уйындар ойоштора. Маликова Ләйсән ашханала дежур тора. Шәрипов Алмаз сүпте түгә.

3. Күп нөктәлар урынына ҡылымдар өҫтәп яҙығыҙ.

Ауылда рәхәт шул!

Әлиәне әтәс тауышы ...... . Ул күҙҙәрен ..... . Ҡайҙан килә икән әтәс тауышы?

Был өләсәһенең өйө бит әле! Кисә генә Әлиә ауылға ҡайтты бит!

Асыҡ тәҙрәнән өләсәһенең мөләйем йөҙө..... . Ҡыҙ тиҙ генә ишек алдына .... . Өләсәһе ейәнсәренә баҡсаны, урамды күрһәтеп .... . Улар икәүләп болонға ла, һыу буйына ла ..... .

4. Сифаттарҙы исемдәр менән парлап яҙ:

Тәрән    әкиәт
Тылсымлы    уҡыусы

Яҡшы күл